# ХАЛЫҠ яҙмышын хәл итә

Силәбе өлкәһендә 1989 йылғы халыҡ иҫәбе буйынса 161169 башҡорт йәшәй. Атап әйткәндә, улар Әшә (5230), Үрге Өфөләй (Верхний Уфалей — 284636), Златоуст (5860), Ҡарабаш (898), Ҡасим (2940), Катав-Ивановск (2861), Ҡыштым (1938), Магнитогорск (12453), Мейәс (5385), Усть-Катав (2575), Троицк (990), Сыбарҡүл (850) ҡалаларында йәшәй. Башҡорттар Арғаяш (26217) һәм Ҡоншаҡ (16560) райондарында күберәк һаҡланып ҡалған. Шулай уҡ өлкәнең Южноуральск (192), Агаповский (2389), Брединский (1066), В. Уральский (2354), Красноармейский (2791), Нағайбәк (459), Нязепетровск (2101), Сыбарҡүл (2391), Металлург (5180) райондарында ла улар ерле халыҡ булып йәшәй.

Ошо йылдың 20 мартында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитов етәкселегендәге делегация Силәбе ҡалаһында булып ҡайтты. Делегацияла башҡарма комитет рәйесе урынбаҫарҙары Әлтәф Ғәйфуллин, Фирҙәүес Хисамитдинова, бюро ағзаһы Дамир Вәлиев, «Ватандаш» журналы редакцияһының бүлек мөхәррире Миңниса Баһуманова ҡатнашты.

Берлектәге киңәйтелгән кәңәшмәгә ҡала-район ҡоролтайҙары етәкселәре саҡырылғайны. Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Тәлғәт Хәйеров үҙенең отчет докладында, быйыл июндә саҡырыласаҡ Силәбе өлкәһе башҡорттарының IV ҡоролтайына әҙерлек мәсьәләләрен алға ҡуйып, башҡарылған эштәргә баһа бирҙе, ҡоролтай ҡарарҙарын еренә еткереп үтәү өсөн фекер алышырға саҡырҙы.

Фекер алышыуҙар ҡыҙыу барҙы, һәр кем үҙен борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып хәл итергә тырышты. Хакимиәт етәкселәре алдына башҡорттарҙың рухи, мәҙәни, белем талаптарын комплекслы хәл итеү, урыҫ, татар һәм башҡа милләттәр менән тиң мөмкинлектәр булдырыу бурыстары ҡуйылды.

Ҡатмарлы ижтимағи-иҡтисади хәлдәр бөтә халыҡтың, шул иҫәптән башҡорттарҙың, үҫеш кимәленә кире тәьҫир яһауы билдәләнде. Мәҫәлән, тыуыуға ҡарағанда үлем күп. Силәбе башҡорттары халыҡты тергеҙеү һәм үҫтереүгә башҡорт телен үҙләштермәйенсә тулайым өлгәшә алмаясаҡтарын яҡшы аңлай, шуға күрә лә кәңәшмәлә башҡорт теле мәсьәләһе киҫкен торҙо. Әлегә башҡорт теле бөтә мәктәптәрҙә лә өйрәнелмәй. Урынтөбәктәрҙә белгестәрҙең етешмәүе, бигерәк тә башҡорт халҡының мәҙәниәтен, сәнғәтен белеүсе кадрҙарға ҡытлыҡ һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Өфө ҡалаһындағы юғары уҡыу йорттарында өлкәнән ҡабул ителгән талиптарҙы тап ошо йүнәлештә әҙерләп сығарыуҙарын һоранылар.

Милли мәҙәниәтте һәм телде тергеҙеүҙә телерадиотапшырыуҙарҙың, матбуғат баҫмаларының роле юғары баһаланды. Шулай уҡ силәбеләр Башҡортостандағы туғандаш ҡалалар менән хеҙмәттәшлекте яңынан тергеҙеү теләктәрен дә белдерҙе.

Сығыштарҙан күренеүенсә, Силәбе өлкәһендә башҡорт халҡының телен, мәҙәниәтен, йола-традицияларын тергеҙеүҙә проблемалар байтаҡ йыйылған.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитов үҙенең сығышында яҙма рәүештә уға адресланған һорауҙарға ла яуап бирҙе, Силәбе башҡорттары ҡоролтайы алдына апрель-май айҙарында Силәбе өлкәһенең район-ҡалаларында ҡоролтайҙар үткәреп, июнь айында Силәбе ҡалаһында өлкә ҡоролтайын саҡырыу бурыстарын ҡуйҙы һәм ошо айҡанлы Силәбе өлкәһе губер-

наторының беренсе урынбаҫары А.Н. Косиловтың күрһәтмә хатын уҡып ишеттерҙе.

Н.А.Мәжитовтың урынбаҫары Әлтәф Ғәйфуллин кәңәшмә алдынан Силәбе өлкәһенең бөтә район-ҡалаларында йөрөп сығыуы хаҡында хәбәр итте һәм, үҙе күргән етешһеҙлектәрҙе барлап сығып, Башҡортостандан ғына ярҙам көтөп ятмай, урындарҙа әүҙем эшләргә саҡырҙы. Фирҙәүес Хисамитдинова, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе булараҡ, Силәбе өлкәһе ҡала-райондарында, ауылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәтен тергеҙеү һәм 30 мартта Өфөлә үтәсәк «Мать и дитя народов Башкортостана» исемле конференцияла танышыу, берҙәм эшләү маҡсаты менән өлкәләге әүҙем ҡатын-ҡыҙҙарҙы башҡалаға саҡырҙы. (Улар конференцияла сәңгелдәк йыры бәйгеһендә сығыш яһанылар).

Киңәйтелгән кәңәшмә Силәбе башҡорттарының милли үҙаңын күтәреү, уларҙы борсоған мәсьәләләрҙе яҡтыртыу, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарарҙарын аңлатыу, бай тарихты өйрәтеү һәм башҡа көндәлек яңылыҡтарҙы халыҡҡа еткереү буйынса киң ҡоласлы эштәр йөкмәтелгән рус һәм башҡорт телдәрендә сығасаҡ «Уралым» гәзитенең исем туйы менән тамамланды.

«Ватандаш» журналының 1998 йылдағы 8-се һаны Силәбе башҡорттарына арналғайны, журналыбыҙҙың был һанында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитовтың Силәбелә үткән кәңәшмәлә һөйләгән сығышы баҫыла.

*Нияз МӘЖИТОВ*



05-2001.p65 69 27.07.01, 12:01